*Фәнис* ЯНЫШЕВ

# Шиғриәт йондоҙо

Әсән ауылына кергәс, талғын һыулы Ҡеүәш йылғаһы буйлап түбән төшәбеҙ. Әҙме-күпме барғас, беҙҙе бейек манаралы мәсет ҡаршы ала. Уның янында, гөлләмәләргә күмелеп, бәләкәй генә матур йорт ултыра. Ул — Шәйехзада Бабич музейы.

Яйлап ҡына ихатаға инәбеҙ, һәм ҡараштар үҙҙәренән-үҙҙәре бейек постаменттағы етди ҡарашлы, ҡыйыу йөрәкле, ил һәм халыҡ азатлығы өсөн көрәшкә әйҙәүсе етәксе, арҡаҙаштарына, яугирҙарына рухи көс өләшеүсе баһадир егеткә төбәлә. Егет постаменттан һикереп төшөр ҙә: «Һаумыһығыҙ, минең ғәзиз башҡорттарым!» — тип ҡосоп алыр кеүек.

Сәскәләрҙең хуш еҫенә иләҫләнеп бер аҙ торғас, йорт эсенә инәбеҙ. Хужабикә — алсаҡ йөҙлө Саҡмағош ҡыҙы, Әсән ауылы килене Зимфира Ғәбиҙуллина ханым — әйҙүкләп ҡаршы ала...

— 1995 йылдың йәмле йәй көнөндә, июнь айында тантаналы рәүештә асылды был музей, — тип һөйләй башлай ул.

Шәйехзада Бабич 1895 йылдың 2 (15) ғинуарында Өфө губернаһы Бөрө өйәҙе (Башҡортостандың хәҙерге Дүртөйлө районы) Әсән ауылында тыуған. Атаһы Мөхәмәтзакир — тыумышы буйынса Ҡыйғаҙытамаҡ ауылы аҫаба башҡорто (хәҙер Мишкә районына керә), әсәһе Сажидәбанат — Әсән ауылы хәҙрәте, типтәр Мөхәмәтһаҙый Шиһабетдинов ҡыҙы.

Мөхәмәтзакир Бабичев Әсәндә икенсе мәхәллә муллаһы була, ауыл мәҙрәсәһендә балалар уҡыта. Ҡырымда Баҡсаһарай ҡалаһында билдәле мәғрифәтсе Исмәғил Гаспринский (Ғаспралы) тарафынан сығарылған «Тәржеман» гәзитен, Ырымбурҙа Риза Фәхретдинов мөхәррирлегендә нәшер ителгән «Шура» журналын алдыра. Орск ҡалаһындағы Әхмәт Исхаҡиҙың «Шәрек» магазины менән бәйләнештә тора.

Исмәғил Гаспринский, Риза Фәхретдиновтар тураһында матбуғатта байтаҡ материалдар баҫылды, ә бына Әхмәт Исхаҡи хаҡында мәғлүмәт бик аҙ. Ошо хәлде иҫтә тотоп, уның тураһында белешмә өҫтәйек.

Әхмәтхан Мөхәмәтлатиф улы Исхаков 1879 йылда Орск ҡалаһында тыуған. Египетта юғары белем алған. Ул 1906 йыл «Шәрек» нәшриәт һәм сауҙа йәмғиәтен ойоштора. Төрлө темаға китаптар сығара, Бейрут, Ҡаир, Стамбул ҡалаларында нәшер ителгән ижтимағи, тарихи һәм дини баҫмалар һата. Мосолман донъяһының ижтимағи-сәйәси тормошонда бик актив ҡатнаша. Икенсе Бөтә Рәсәй мосолман йәмғиәтенең идара ағзаһы, Орск думаһы ағзаһы, Орск өйәҙ земствоһы идараһы ағзаһы, Ырымбур мосолмандарына белем, уҡытыу-тәрбиә биреү йәмғиәте идараһы ағзаһы була. 1917 йылдан һуң хәбәре юҡ.

Уның атаһы Мөхәмәтлатиф Исхаков Бәләбәй өйәҙе Иҫке Ҡалмаш волосы Аблай ауылы башҡорто. Ул 1848 йылды тыуған. Төркиә һәм Египетта белем алып ҡайтҡас, 1875 йылдың 30 ноябрендә Ырымбурҙағы Каруанһарай мәсетенең тәүҙә икенсе муллаһы итеп тәғәйенләнә. Унан һуң Ырымбур губерна идараһының 1876 йылдың 3 июнендәге указы нигеҙендә ул шунда уҡ имам-хатиб һәм мөдәррис итеп тәғәйенләнә. Әммә Мөхәмәтлатиф бында оҙаҡ эшләй алмай, Орск мосолмандарының үтенесе буйынса 1877 йылдың 9 мартында, указ нигеҙендә ҡаланың 1-се мәсетенә 1-се мулла итеп тәғәйенләнә. 1890 йылда уға ахун дәрәжәһе бирелә. Ә 1905 йылдың 6 декабрендә батша Николай II Мөхәмәтлатиф ахунды Станислав таҫмаһына беркетелгән «За усердие» көмөш миҙалы менән бүләкләй.

Мөхәмәтлатиф Исхаков, улы Әхмәтханды эйәртеп Аблай ауылына ҡайтып йөрөгәндә, Әсән ауылына ла инеп сыҡҡандарҙыр, Бабичевтар менән шул осорҙа танышҡандарҙыр, дуҫлашҡандарҙыр, тип фараз итәйек. Шәйехзада Бабичтың Әхмәтхан Исхаҡов менән даими бәйләнештәренә дәлил — шағирҙың «Китабеннас» шиғыры.

Әхмәт Исхаҡи, һин бик илтифатһыҙһың буғай:
Мин һоратҡан өс рисалә әл дә юҡ, үтте өс ай.

Төрлө яҡлы белемле Мөхәмәтзакир Бабичев заманының алдынғы ҡарашлы муллаһы, хәлфәһе булған. Атаһы тураһында Фәтхелҡадир Бабичтың хәтирәләрендә ошондай юлдар бар: «...Мифтахетдин Аҡмулла, Ғабдулла Туҡай шиғырҙарын атайым мауығып уҡый торғайны. Ул үҙе уҡытҡан мәҙрәсәһен йәдит ысулы (яңыса метод) уҡыу йортона әйләндерергә тырышты».

Шәйехзада Бабичтың әҙәби мираҫын өйрәнеүгә, уны халыҡҡа еткереүгә күп көс һалған Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев: «Китап нуры төшкән был йортта Шәйехзада күңелендә тәбиғәттән һалынған ижад дәрте иртә уяна, һәм уның тәүге шиғырҙарында ла ике образ — ғилемдең яҡтыһы менән наҙанлыҡтың ҡара күләгәһе килеп бәрелешә. Башҡорт халыҡ эпосындағы: «Батыршаның үлгән йылы Салауат тыуған йыл ине», — тигән һүҙҙәрҙе үҙгәртеп әйткәндә: «Аҡмулланың үлгән йылы Бабич тыуған йыл ине». Бабич әҙәбиәткә мәғрифәтте идеаллаштырып килде. Һәм замандашына «Һин булырмы?» шиғырында: «Белмәгән менән бәрәбәрме белә торған кеше?» — тип өндәште. Ул яҙыша башлаған осорҙа Аҡмулла шиғырҙары башҡорт араһында киң таралып йәшәй ине. Һәр яңылыҡҡа күҙе үткер Шәйехзада былдай байлыҡты ситләп үтмәне», — тип яҙҙы.

Буласаҡ шағир тәүҙә атаһы уҡытҡан мәҙрәсәлә белем ала. Ибтидаи (башланғыс) һәм рөшди (урта) синыфтарын тамамлай. Шәйехзада Бабич уҡыған мәҙрәсә әлеге музей урынында була. Уны Әсән ауылы байы Сәхипзада Мәҡсүтов 1900 йылда һалдыра. Мәҙрәсә революция мәленә тиклем эшләй. 1919 йылдар тирәһендә бина һүтеп алына, Суҡҡул ауылына күсерелә.

«Әсән мәҙрәсәһендә уҡыған йылдарында Шәйехзада ҡыҫҡа-ҡыҫҡа, ләкин тапҡыр әйтелгән шиғырҙар, таҡмаҡтар сығара торғайны. Һүҙгә айырыуса оҫта булып, кешене гел генә ҡытыҡлап тороуына һоҡланып, берсә көнләшеп тә ҡуя торғайным», — ти хәтирәләрендә Фәтхелҡадир Бабич.

Ауылда уҡыуын тамамлап, Шәйехзада 1910 йылда Ҡаҙағстандың Турғай ере Дүсәнбәй волосында Мортаза исемле ҡаҙаҡта балалар уҡыта. Ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ телдәрен үҙләштерә, дала фольклоры үрнәктәрен яҙып ала, үләң әйтешеп, ҡаҙаҡ аҡындары менән ярыша.

Шәйехзада Бабич 1911—1916 йылдарҙа Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡый. Заманының алдынғы ҡарашлы мәғрифәтселәре уҡытҡан мәҙрәсәлә ул Зыя Камали, Мәжит Ғафури, Ғәлимйән Ибраһимов, Кәрим Хәкимов, Хабибулла Ғәбитов, Кәрим Иҙелғужин, Хәбибулла Ибраһимов, Зыя Өммәти, Ғизетдин Иҫәнбирҙин, Зыя Йәрмәкәй, Фәйзи Вәлиев, Мөхәммәт Бикбулатов, Ямалетдин Юмаев, Сәғит Рәмиев, Вәсил Солтанов, Ғибәт Алпаров, Ибраһим Башмаҡов, Сәғит Сүнчәләй, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Шәһит Хоҙайбирҙин кеүек әҙиптәр, артистар, буласаҡ журналистар, дәүләт эшмәкәрҙәре менән аралашып йәшәй. Мәҙрәсәлә ҡулъяҙма рәүешендә сығарылған «Парлаҡ», «Эләктергес» исемле журналдарҙы сығарыуҙа әүҙем ҡатнаша. Башҡорт халҡының төрлө ҡыҫымдар арҡаһында ауыр тормош көтөүе, башҡорт ерҙәре мәсьәләләре киҫкенләшеү, әсә телендә яҙма булдырыу, дөйөм белем биреүҙе камиллаштырыу тураһында борсолоп шиғырҙар ижад итә. Өфөлә, Башҡортостандың башҡа төбәктәрендә әҙәби кисәләр, концерттар ойоштороусыларҙың береһе була. Мандолинала виртуоз уйнай.

«Ғәлиә» мәҙрәсәһен тамамлағас, бер йыл Мифтахетдин Аҡмулла, Мәжит Ғафури, Ғабдулла Тукай рухы йәшәгән Троицкиҙа уҡытыу эше менән шөғөлләнә, «Аҡмулла» журналын сығарыуҙа ҡатнаша.

Өлгөрөп еткән юғары интеллектлы шағир, ҡыҙҙар менән аралашыуға әүәҫ егет, сәхнәнең тылсымлы ләззәтендә йөҙөп уйнаусы виртуоз мандолинасы, етмәһә, шәп декламатор Шәйехзада Бабич, уҡыуын тамамлағас, нишләп зыялылар, йәштәр менән аралашыу мөмкинлеге күп, шағир өсөн мөһим булған төрлө матбуғат баҫмалары, китаптар нәшер ителгән Өфөлә ҡалмай, Ҡазан, Ырымбурға бармай, ҡаҙаҡ далаһы менән сиктәш, бәләкәй генә Троицк ҡалаһына китә? Сәбәбе — фекерҙәштәр эҙләүҙә. Өфөлә унын ынтылышын аңларға теләгән, ижадына төплө баһа бирерлек дуҫ-иштәре юҡ кимәлендә. Быға дәлил — шағирҙың «Көтәм» шиғыры тураһында «Тормош» гәзите мөхәрририәтендә фекер алышыу. Алты куплетлы ғына шиғыр Мәжит Ғафуриҙы, Сәғит Рәмиевты, Нәжип Думауиҙы, Сәғит Сүнчәләйҙе тетрәндерҙе, тип яҙа үҙенең иҫтәлектәрендә Зариф Бәшири.

## Көтәм

Йөрөгән саҡта башҡорт туғайҙарын,
Йәнем әллә ҡайҙа елкенә;
Ишеткәндә моңло ҡурайҙарын,
Йөрәгемә моңдар бөркөлә.

Тауҙарына менһәм, ҡырҙа йөрөһәм,
Балҡый йәннәт нуры — гөлөстан,
Меҫкен башҡорт ауылын килеп күрһәм,
Аңҡый хәсрәт, үлем — гүрестан.

Гүрестандай ғәмле ауылдарҙа
Ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр,
Йәнле мәйеттәрҙең ғәмен көйләп,
Илап аға Һаҡмар, Яйыҡтар.

Яныпкөйөп, бәғерем өҙгөләнеп,
Ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем,
«Килер микән аҡ көн беҙгә лә?» — тип,
Уралҡайға ҡарап илайым.

Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,
Урал ята әкрен, тын ғына;
Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,
Килә башлай тәмле уй ғына...

Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын;
Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.

Романтик характерлы, йөрәгендә халыҡ яҙмышын йөрөткән кешегә фекерҙәш табыу ауыр шул. Уны аңламайҙар. Шиғыр ул саҡта баҫылмай.

Шәйехзада Бабич Троицкиҙа Өсөнсө мәсет янындағы мәҙрәсәлә уҡыта. Тарихи документтарҙан күренеүенсә, ул мәсет 1863 йылда һалынған. Финанс яҡтан сауҙагәр Абдулла Бакиров ярҙам итә. Мәсеттең тәүге имамы һәм мәҙрәсәнең мөдәррисе итеп Мөхәмәтйән Рахманғолов хәҙрәт тәғәйенләнә. Бында тағы шуны әйтеп үтеү кәрәктер. Мөхәмәтйән хәҙрәт, уның ҡустыһы Әхмәт ахун Рахманғоловтар — бөйөк Аҡмулланың дуҫтары. Уға һәр саҡ ярҙам итеп, аралашып йәшәгәндәр.

Мөхәмәтйән хәҙрәттең Ғабдрахман, Зыяитдин, Шәһиәхмәт исемле өс улы булыуы билдәле. Улар Египет, Сауд Ғәрәбстаны, Төркиә университеттарын тамамлап ҡайталар һәм Троицкиҙа эшләйҙәр. Ғабдрахмандың шиғырҙары төрлө псевдоним аҫтында матбуғатта йыш баҫыла. Атаһы Мөхәмәтйән хәҙрәт 1900 йыл гүр эйәһе булғас, Өсөнсө мәсеттең имамы вазифаһын үтәй. Йәмәғәт эшмәкәрлеге менән актив шөғөлләнә. Бөтә Рәсәй мосолман съездарында ҡатнаша. Империяла мосолман балалары ла белем алыуға, төрлө һөнәр үҙләштереүгә тиң хоҡуҡлы булырға тейешлеге хаҡындағы мәсьәләләрҙе күтәрә. Фарсы, ғәрәп, төрөк, урыҫ шағирҙарының шиғырҙарын тәржемә итә. Хатта, Шәйехзада Бабичтың поезд вагонында бер ҡыҙға ғашиҡ булып яҙған шиғырын тиҙ генә урыҫсаға әйләндереп, ялҡынлы итеп уҡып, һылыуҙың йөрәгенә мөхәббәт уты һала. Был хәл улар икәүләп Өфөгә, «Ғәлиә» мәҙрәсәһенең 10 йыллығын байрам итергә китеп барғанда була.

Алға китеп, тағы шуны өҫтәйек. Ғабдрахман хәҙрәт 1912 йылдың май—июнь айҙарында бөйөк татар шағиры Ғабдулла Туҡайҙы Троицк ҡалаһына саҡырып, үҙенең дачаһында ҡымыҙ менән дауалай, бер нисә айға булһа ла уның ижади тормошон оҙайта.

Ғабдрахман хәҙрәттең тормош юлы фажиғәле тамамлана. 1925 йылда уны гражданлыҡ хоҡуғынан мәхрүм итәләр, бер аҙҙан йортон конфискациялайҙар. Төрлө кешеләрҙә йәшәргә мәжбүр була. 1937 йылда ҡулға алына һәм репрессиялана.

Зыяитдин мулла Рахманғолов 1906 йылдан алып 1920 йылғаса Өсөнсө мәсет янындағы мәҙрәсәнең мөдәррисе хеҙмәтен үтәй. Шәйехзада Бабич менән бергә балаларға белем бирә. Тарихи документтарға таянып, шуны әйтәйек. Мәҙрәсәлә

башланғыс (ибтидаи) синыф ҡына була. 1913/1914 уҡыу йылында 86 шәкерт белем ала. Барыһы ла өйҙәренә ҡайтып йөрөй. Ҡ.Вәлиуллин, Ш.Ҙаһалетдинов, С.Фәйзуллин, Ғ.Вилдановтар — мөғәллим. Ғәрәп, иҫке төрки телдәре, ислам дине нигеҙҙәре, ислам тарихы, арифметика, география фәндәре уҡытыла. Зыяитдин мулла ислам дине нигеҙҙәрен, Шәйехзада Бабич ислам тарихын, география дәрестәрен алып барған тип иҫәпләйбеҙ. Иҫке төрки телен уҡытыуға Троицк мәҙрәсәләре Ҡазан яғында белем алып килгәндәрҙе тәғәйенләргә ынтылғандар.

Шәһиәхмәт Рахманғолов проза һәм пьесалар яҙа. Уның сәхнә әҫәрҙәре Троицк, Ырымбур, Ҡазан, Әстерхан ҡалаларында ҡуйылған. Әҙәби псевдонимы — Әхмәт әл-Тажетдин (аҙаҡ Әхмәт Рахманҡолой псевдонимын ала). Шәйехзада Бабичтың «Ҡитабеннас» шиғырында шундай юлдар бар:

Әхмәт эт-Тажетдини, тас тин ҡоло, ни эшләй икән?
Әллә бер ни эшләмәй, аҡтыҡ тинен ослай микән?

Күрәһең, Шәһиәхмәт аҡса мәсьәләһендә бик һаҡ эш иткән.

Ғабдрахман, Зыяитдин һәм Шәһиәхмәттең әсәһе — Фәрзәнә абыстай. Фәрзәнә абыстай Аҡмулла шиғырҙарынан һәр саҡ өҙөктәр әйтеп, йор һүҙ һөйләп, ҡыҙ балаларға белем биргән. Үҙе лә бәйеттәр сығарған. Шәһиәхмәт тә үҙенең псевдонимы итеп өләсәһенең атаһы исемен алған.

Бөйөк шағирыбыҙ Мифтахетдин Аҡмулла был ғаиләлә иң ҡәҙерле ҡунаҡтарҙың береһе булып, уның хөрмәтенә өйҙәрендә һәр саҡ оло шиғри байрамдар ойоштороғандар.

Шул уҡ осорҙа Силәбе өйәҙе Әлмән ауылынан белемле шағир, тәржемәсе Ямалетдин Юмаев та Троицкиҙа ижад итә. Журналист, тарихсы Ғәбделбарый Баттал, журналист, йәмәғәт эшмәкәре Мәхмүт Бөдәйле, ҡаҙаҡ әҙәбиәте классигы, «Айҡап» журналын ойоштороусы һәм уның тәүге мөхәррире Мөхәмәтжан Сералин, ҡаҙаҡ халҡын белемгә, мәҙәниәткә ылыҡтырыу өсөн көнө-төнө хеҙмәт иткән бер туған Жиһанша һәм Жансолтан Сейдалиндар ҙа уның серҙәштәре була. Тимәк, Шәйехзада Бабич Троицкиҙа әҙәбиәт һәм сәнғәткә яҡын кешеләр менән аралашып йәшәгән, тип әйтә алабыҙ.

Бабич 1917 йылда Ырымбурҙа нәшер ителгән «Ҡармаҡ» журналы редакцияһына эшкә күсә. Рәсәйҙә батша власы ҡолатылғас, империяның төрлө төбәктәрендә милли-азатлыҡ хәрәкәте көсәйә. Ялҡынлы шағир шул осорҙа Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡортостандың үҙаллылығы өсөн көрәшселәр сафына баҫа һәм ғүмеренең һуңғы минутына саҡлы ҡорал һәм ҡәләм менән ошо идеяға хеҙмәт итә.

— Бындағы экспонаттарҙы йыйыу тарихы үткән быуаттың 60-сы йылдарынан башлана, — тип һүҙен дауам итә музей мөдире Зимфира ханым. — Беренсе документтар, фотолар, хаттар Әсән мәктәбендә директор, әҙәбиәт уҡытыусыһы, ошо музейҙың тәүге мөдире, Башҡортостандың күренекле журналисы Фәнүс Фәтихов (1936—2005) тарафынан эҙләп табыла. Тәүҙә Шәйехзада Бабич тормошона һәм ижадына арналған музей 1985 йылда Әсән мәктәбендә асыла.

Әле Башҡортостан Республикаһы Милли әҙәбиәт музейы филиалы Шәйехзада Бабич музейында 300 төп һәм 100-гә яҡын фәнни-ярҙамсы экспонат тупланған. Ҡомартҡылар араһында Шәйехзада Бабич уйнаған мандолина ла бар. Ул Илеш районында йәшәгән нәҫелдәрендә һаҡланған икән.

Шағирҙың исемен халыҡҡа ҡайтарыу һәм уның китаптарын баҫтырыу тураһында оҙаҡ йылдар хәстәрлек менән Шәйехзада Бабичтың иң кесе һеңлеһе Фәсәхәт Бабичева (1913—1987) йөрөй. Ул хатта СССР-ҙың ул саҡтағы Министрҙар Советы председателе Алексей Николаевич Ҡосыгинға тиклем хаттар яҙа. Фәсәхәт Бабичева ағаһына ошо шиғри юлдарҙы арнай:

Ғинуар айы. Алһыу таң ғына.
Күктә аяҙ. Баҡса тын ғына.
Ҡапыл көслө тауыш! Өй йәмләнә,
Бер ир бала килә донъяға.

Бала тыуа шөйлә йөҙлөк менән.
Һирәк осраҡ. Ғәжәп ғәләмәт.
Ҡендеккәйгә шатлыҡ, күлдәк менән
Йортҡа юрау дәүләт-ғәләмәт.

Ата-әсәһенә — ғәзиз бәпәй.
Һиртмәләнгән бәллеү-бишеге.
Тәҡбир әйтеп, уға Әхмәт бабай
Шәйехзада ҡуша исемен.

Бабай уны, башҡортом, тип һөйә,
Намыҫ, бәхет, теләп изгелек.
Илгә, йортҡа, ата-әсәһенә
Күрһәтһен, ти, яҡты игелек.

Музей ҡомартҡылары араһында шулай уҡ Фәсәхәт Бабичеваның хаттары, иҫтәлектәре, төрлө документтары бар.

Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Марат Байназаров уны донъя матурлығына, тәбиғәткә, кешеләргә ғашиҡ, нескә күңелле лирик шағир итеп кәүҙәләндергән. Ул ижад иткән картиналағы шағир беҙгә былай тип әйтә һымаҡ:

Эх, бөгөн донъя кейенгән ҡыҙға оҡшай, тәп-тәпәй,
Ҡыҙ булып баҫҡан тәбиғәт донъяға ап-аҡ тәпәй.

Ҡауҙы кәүсәр шишмәһе өҫтөнән иҫкән ел кеүек,
Их, бөгөнгө ел һауанан бер ғәжәп ләззәт татый.

Ниндәй йәмле, их, бөгөн ожмах көнөнән йәмле көн.
Ҡайҙа ожмах... Фирҙәүес бер яҡта торһон хатта ки!

Билдәле скульптор, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Зилфәт Басиров Шәйехзада Бабичты (имәндән эшләнгән бюст) ил, халыҡ тормошо, Башҡортостандың азатлығы тураһында тәрән фекер йөрөтөүсе аҡыл эйәһе итеп күрә. «Теге донъя рәхәттәрен» көтөп ятыу хилаф, ә бөгөнгө фани донъяла һәйбәт йәшәргә тырышырға кәрәк, ти бында Шәйехзада Бабич һәм көрәшеп үткәрергә өндәй ҡыҫҡа ғүмерҙе:

Ник ҡыҙмайһың, күңелем, ник юҡ өсөн
Ағыулайһың минең аңымды!
Көйҙөрөп һин эстән, һис ваҡытһыҙ
Сығараһың, ахыры, йәнемде.

Үҙеңде һин иҙеп янған менән,
Уйлама һин, ваҡыт үтер, тип,
Ҡара төндә ҡара болот булып
Ерҙе баҫҡан зөлмәт китер, тип.

Һине бәйләп тотҡан ныҡ бығауҙы
Бик тиҙ генә өҙә алмаҫһың.
Аяҡ аҫтың тулы тәрән соҡор,
Бик тиҙ йүгереп китә алмаҫһың.

Төкөр донъяһына, бул түҙемле,
Ағыулама юҡҡа тамырыңды.
Ысын ирекле алғы көн өсөн
Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!

Музейҙа шулай уҡ шағирҙың ижадын һәм тормошон өйрәнеүсе яҙыусы-ғалимдар Рауил Бикбаев, Рәшит Шәкүр, Ғәзим Шафиҡов тураһында ла мәғлүмәттәр бар.

Шәйехзада Бабич музейынан халыҡ өҙөлмәй. Бында төрлө әҙәби осрашыуҙар, шиғриәт байрамдары үткәрелә. Күптән түгел Милли әҙәбиәт музейы директоры Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратова хәстәрлеге менән музей йортона ремонт эшләнде. Экспозициялар яңыртылды. Музей хеҙмәткәрҙәре архивтарҙа эҙләнеп, байтаҡ яңы материалдар табып, бөйөк шағирҙың изге йортоноң түренә урынлаштырғандар. Хәҙер музей әҙәбиәткә, шиғриәткә ғашиҡ кешеләрҙе матурлығы менән һоҡландырып ҡаршы ала. Постаменттағы халыҡ азатлығы өсөн көрәшкә әйҙәүсе бөйөк шағир һәм яугир һәйкәле (авторы — скульптор Мәүлетбай Хәлилов, Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты) иһә беҙгә изге теләк теләй һымаҡ:

Айға үрләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
— Ит ғәфү, әй, ай, — тинем мин, —
Нурҙарыңды урланым.
— Һис зарар юҡ, ал, — тине ай, —
Ал да нур сәс халҡыңа;
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым ҡояштың нурҙарын.